Мәләүез үҙәкләштерелгән китапхана системаһы
М. Буранғолов исемендәге 1-се һанлы китапхана - филиалы



# Ырыу көсө – быуын көсө

## Шәжәрә

**Халыҡ сәсәне
Мөхәмәтша Буранғолов
шәжәрәһе**

Мәләүез 2019

**Ырыу көсө – быуын көсө: халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов шәжәрәһе [Текст]: шәжәрә / Төҙөүсеһе Н.С. Исхаҡова. – Мәләүез, 2019. - 37 б.**

## Уҡыусыға



Халҡыбыҙҙың һин арҙаҡлы ғәзиз улы,
Халҡың юлы – һинең тотҡан изге юлың,
Ил алдында иң юғары биргән антың
Йөрәгеңдә яна, булып һүнмәҫ ялҡын.

Йөрәгеңдә ил ҡотондай- һүнмәһен ут,
Ата-баба аманаты – үлмәһен рух!
Санын оло, Урал-тауҙай дәрәжәле,
Аҡ намыҫтан айырыла күрмәһен ул,
Бар халҡыңдан айырылыу белмәһен ул!

Ҡәҙим Аралбай

Шәжәрә - башҡорт ҡәбилә һәм ырыуҙарының генеалогик яҙмаһы. Шәжәрәгә ир яғынан ырыу башлыҡтарының исемдәре, тарихи ваҡиғалар тураһында мәғлүмәттәр, ырыу һәм ҡәбилә тормошондағы мөһим факттар индерелгән. Шәжәрә үҙенсәлеге - тарихи ысынбарлыҡтың хыял менән ҡушылыуында. Ырыу шәжәрәһен белеү мотлаҡ тип һаналған. 15-16 быуаттарҙа шәжәрә яҙма форма ала. Тарихи сығанаҡтарҙа, шәжәрәләрҙә теркәлгән мәғлүмәттәр киләһе быуындарға барып етә, артабан үҫтереүҙе талап итә, эҙләнеүҙәргә этәргес бирә.

Был шәжәрә күсермәһе арҙаҡлы шәхсебеҙ, Башҡортостандың халыҡ сәсәне, билдәле фольклорсы, драматург һәм йәмғәт эшмәкәре Мөхәмәтша Абдрахман улы Буранғоловтың нәҫел, зат – зәүерен барлауҙан мәртәбә. Утыҙ һигеҙ быуындан торған был шәжәрәлә Сынғыҙ хандың замандашы булған Төмән бей, табын ҡәбиләһенең олуғ атаһы булараҡ сәсәндең тамырҙашы һәм башланғыс нәҫел ептәренең береһе. Шуныһы бик ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле: шәжәрә авторы Б.Хәмиҙуллин был ихтибарға һәм ихтирамға лайыҡлы хеҙмәтендә һәр бер быуын вәкилдәренең үҙ дәүерендә ил мәнфәғәте өсөн ниндәй генә булһа ла ҙур эштәр менән данланыуын һыҙыҡ өстөнә алып, барлап китә.

Ошо йәһәттән Мөхәмәтша Буранғоловтың тоҡомдаштарына тиклем төҙөлгән был шәжәрә ебе, асыҡтан асыҡ Буранғоловтарҙың зыялы тоҡом икәнен һөйләп тора. М. Буранғолов үҙе лә хеҙмәт юлын ревиз материалдарынан йыйып, халыҡ араһында бай архив материалдары туплаған кеше. Әлеге заманда көнкүреш иткән Ырымбур өлкәһенең Красногвадейский районы Үрге Ильяс ауылында йәшәгән милләттәштәребеҙгә, Буранғолов атлы фамилия йөрөтөүселәргә оло рухи маяҡ ул.

**1. Хәмиҙуллин, Булат. Мөхәмәтша Буранғолов шәжәрәһе [Текст] / Б. Хәмиҙуллин, БДУ- ның өлкән уҡытыусыһы // Ағиҙел. - 1998. - №9. - Б. 137 - 148.**

*Башҡорт тарихына Мөхәмәтша Буранғолов сәсән, фольклорсы, әҙәбиәттә фольклор - этнографик стиль йүнәлешен тыуҙырыусы драматург, милли опера сәнғәтенә нигеҙ ташын һалыусы либреттист булып ингән, тибеҙ. Хаҡ һүҙҙәр. Әммә уның ижад ҡомары, донъяны күреү-тойомлауы, тарихты һәм тарихи процесты аңлау-аңлатыуы, тимәк, ижадының функциональ һиммәте лә күпкә киңерәк. Бәһлеүән был шәхестең нәҫел-ырыу шәжәрәһен юллағанда, быға инанмай мөмкин түгел.*

Ниндәй сығанаҡтар буйынса төҙөлдө уның шәжәрәһе?

Мәғлүм булыуынса, киң диапазонлы был талант эйәһе - ҡара-табындарҙан, тыуған урыны - Быҙаулыҡ өйәҙе, Йомран - Табын волосы, Үрге Ильяс ауылы. Ҡара - табын... Йомран - табын... Ильяс ауылы... Былар араһында берәй бәйләнеш бармы, әллә осраҡлы хәлме был? Тарих ни ти ул хаҡта? Ошо һорауҙарға яуап эҙләү процесында байтаҡ баҫмалар күҙҙән үтте, шулар араһында тос ярҙам иткәне өсәү булды: тәүге икәүһе - Р. Ғ. Кузеевтың «Башҡорт шәжәрәләре» (Өфө,1960) һәм «Башҡорт халҡының килеп сығышы» (М.,1970) тигән китаптары, өсөнсөһө - Ә. З. Әсфәндиәров тарафынан әҙерләнеп баҫтырылған тарихи-документаль бер сығанаҡ («Көньяҡ - Урал археографик йыйынтыҡ». 2- се сығарылыш. Өфө,1976). Һөҙөмтәлә ҡара - табындар менән йомран - табындарҙың туғанлығы асыҡланды. Бынан тыш, йәнә бер деталь асҡыс хеҙмәтен үтәне - баҡһаң, әлеге Ильяс ауылы тотошлайы менән Аҡынсыҡ түбәһенән торған икән. Нәҡ ошо исем ҡара - табындар шәжәрәһендә осрай ҙа инде. Был, тимәк, осраҡлы хәл булмаҫ. Йәнә бер штрих: Р. Ғ. Кузеев китабы буйынса, Ҡара - табындар шәжәрәһендә Аҡынсыҡҡа тиклем бөтәһе лә бейҙәр булған, тик Аҡынсыҡтан ғына тархан теҙмәһе башланған. Улайғына ла түгел, ғалим ниңәлер шәжәрәне кинәт ошо урында өҙгән, түбәнге яғын бирмәгән. Бирмәгән генә лә түгел, бәлки, тарихи-конкретлылыҡ принцибына ҡаршы

килеп, шәжәрәнең «реакцион роле» хаҡында һүҙ ҡуйыртып алған. Башҡа шәжәрәләргә ҡарата былдай аңлатмаһы осрамай, киреһенсә, Ғәли Соҡорой, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мәжит Ғафури шәжәрәһе хаҡында яҙған сағында ыңғай ҡараш - мөнәсәбәте һиҙелә. Тора - бара, материал эсенә ингән һайын, быныӊ менән Мөхәмәтша Буранғолов баҡсаһына таш ташлауы аңлашыла.

Әйтергә кәрәк, Мөхәмәтша Буранғолов шәжәрәһен тергеҙгәндә «Материалы по истории Башкирской АССР» күп томлығы, М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр»е, Ғ. Соҡоройҙың «Шәм яҡтыһы», ревиз (халыҡ иҫәбен алыу) материалдар, ниһәйәт, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан 1960 йылда ойошторолған экспедиция мәғлүмәттәре лә ярҙам итте. Шулар нигеҙендә бер ыңғайҙан Р. Ғ. Кузеевтағы быуындар теҙмәһенә бер нисә төҙәтмә лә индерелде.

Туранан - тура шул шәжәрәгә күсер алдынан йәнә бер - ике һүҙ: кешелек донъяһы 3 миллион йыл самаһы йәшәп килә, ә бына сәңғәттең тәүге яралғылары, әйтәйек, ҡая, мәмерйәләрҙәге һүрәттәр, дөрөҫөрәге-һүрәтләү сәңғәтенең тәүге аҙымдары бынан ни бары 40 мең йыллап элек башланған, тиҙәр бөгөн археологтар. Әгәр был ысынлап та шулай икән һәм был – художестволы аң, аңлы ижадтың емеше икән, һүҙ сәңғәте лә унан бер ярый ситтә тормағандыр бит. Әҙәм затын солғап алған донъя үҙе үк – ағас, һөйәк, таш, тәбиғәттең үҙ буяуҙары – уның ана шул художестволы фекерен бойомға ашырыу сараһы ла булған шикелле, шул шарттарҙа һәм шул дәүер кешеһенән иң элек скульптур әҫәрҙәр өмөт итеү үҙенән - үҙе аңлашылып тора. Ана шул кеше затының һүҙгә иғтибары ла артҡандан - арта барып, һәр һүҙгә айырым бер мәғәнә, айырым бер йөкмәтке һалыуы ла тәбиғиҙер. Былдай ижадтың хикмәте шунда – ағастан, таштан, һөйәктән яһалған әйберҙәр кеүек үк - һүҙҙән туҡылған исемдәр ҙә аңлы рәүештәмелер, интуитив тойомлауҙанмылыр, ниндәйҙер бер самимилек, симметрия һәм эске ритм талаптарына яуап та биргән. Нимә тураһында һөйләй был? Шуныһы шикһеҙ: әҙәм заты үҙенең йәшәгән урынын һәм

мөхитен үҙенә нисек ҡулай булһа шулай яраҡлаштырыу менән генә сикләнмәгән, ә матурлыҡ, эске мәғәнәүилек тойғоһона ла таянып эш иткән. Кешеләр исеменә һалынған фәлсәфәүи мәғәнә менән дә шул уҡ хәл күҙәтелә.

Хәҙер шәжәрәнең үҙенә күсәбеҙ. Һәр заттың алдынан 1, 2, 3...рәүешендә килгән һандар теҙмәһе ошо заттың бер-бер артлы донъяға килгән «балалары, балаларының балалары» тигәнде аңлата. Конкрет зат артынан килгән тәүге һан – шул балаларҙың һаны, икенсеһе-быуындар һаны.

1. **Төмән бей 0/1-**табын ҡәбиләһенең «олуғ атаһы»,Сыңғыҙ хандың замандашы. Көнсығышта Тубыл, Иртыш йылғалары буйында донъя көткәндәр.

2. **Төмән улы Майкы бей 1/2 –** күршеләрсә татыу йәшәргә теләпмелер, Сыңғыҙ хан менән дуҫлашҡан, юл-сәфәрҙә бергә йөрөгән, табын ҡәбиләһенән ҡара-табындар ырыуын башлап ебәреүсе.

3. **Майҡы улы Сура бей 1/3 –** Майҡы бейҙең өс-дүрт улынан иң олоһо.

4. **Сураулы Сөмбай бей 1/4;**

5. **Сөмбай улы Иоламбай бей 1/5;**

6. **Йоламбай улы Утарсы бей 1/6;**

7. **Утарсы улы Актирә бей 1/7;**

8. **Актирә улы Аҡбүре бей 1/8;**

9. **Аҡбүре улы Сурабей 1/9;**

10. **Сура улы Туғыҙбай бей 1/10;**

11. **Туғыҙбай улы Ҡушылбай бей** (туҡ-сорандарса, Ҡушындар) **1/11;**

12. **Кушылбай улы Сәйет бей 1/12;**

13. **Сәйет улы Ҡыҙылкөҙрәт бей 1/13;**

14. **Ҡыҙылкөҙрәт улы Дәрүиш бей1 /14;**

15. **Дәрүиш улы Биктимер бей 1/15;**

16. **Биктимер улы  Һарат бей 1/16;**

17. **Һарат улы Тәкәй бей 1/17;**

18.**Тәкәй улы Аҙнағол бей 1/18;**

19.**Аҙнағол улы Татлыбай бей 1/19;**

20.**Татлыбай улы Дәрүиш бей 1/20;**

21. **Дәрүиш улы Баязит бей 1/21;**

22. **Баязит улы Үмерәк бей 1/22;**

23.**Үмерәк улы Теләнсе бей 1/23;**

24.**Теләнсе улы Мулдыр бей 1/24;**

25. **Мулдыр улы Һаҡғол бей 1/25;**

26. **Һаҡғол улы Мәмәт бей 1/26;**

27. **Мәмәт улы Дәрүиш бей 1/27;**

28. **Дәрүиш улы Һарыбай бей 1/28.**

Сыңғыҙ хандың үҙе, улдары һәм ейәндәре, ейәндәренең йәндәре менән тыныс йәшәүҙәр күпме һуҙылғандыр – өҙөп әйтеүе ҡыйын. Әммә шуныһы асыҡ: улар башҡорт ырыуҙарын ҡыҫырыҡлағандан-ҡыҫырыҡлай барған. Быға, етмәһә, ырыу – ара ыҙғыштар ҙа өҫтәлгән. Татыулыҡ һәм берлек юҡ та бәлә-ҡаза көт тә тор. Ахыр сиктә ҡара-табындар Миәс йылғаһы буйына, Миндәк һәм Абзан ауылдары тирәһенә күсергә мәжбүр булған. Әммә бында ла әллә ни кинәнеп йәшәй алмағандар. Бейҙәр исеме –шуға ишара. Әйтәйек, «Туғыҙбай» һәм «Ҡушылбай» - ишлелекте, «Утарсы», киреһенсә, һибелеп-таралып йәшәүҙәрен аңғартһа, күмәк йәшәгәндә–көнитмешенең дә ҡеүәтлерәктер(«Ҡыҙылҡөҙрәт»), дәрүиштәрсә берәҙәк һәм тарҡау саҡта емерек йәшәүең ҡотолғоһоҙ («Дәрүиш», «Үмерәк»), теләнсе хәленә төшөүең дә ошонандыр («Теләнсе»), моғайын Борон-борондан башҡорт шәжәрәһе төбөнә ана шул берлек, «берлектә - терекрек» идеяһы һалынған. «Теләнсе»- «Мулдыр» шулай уҡ антропоним ғына булмайынса, йәшәйештең ҡара-ҡаршы һәм шул уҡ ваҡытта бер-береһенән айырылмаҫ ике ҡотоптан тороуына ишара. Мал-мөлкәтеңде һаҡлай белһәң, донъяң да алға барыр («Мулдыр»-«һаҡғол»), тигән шул заман кешеләре. Ә шулай ҙа улар кем (бай,ярлы) булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәрен бей итеп тойған.

Сөнки улар үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булған. Кем белә, бәлки, ошо тойғо арҡаһында тарих, донъя йөҙөнән юғалмағандарҙыр ҙа. Быны башҡорт фольклорының «Ҡуҙыйкүрпәс», «Алдар менән Зөһрә» кеүек боронғо ҡомартҡыларынан башлап, шуларға XIV-XIX быуаттарҙа тәбиғи ялғанып киткән сәсәндәр ижады, һуңғы йылдарҙа асыҡланыуынса, унһигеҙ томлыҡ фольклор әҫәрҙәре, ахыр сиктә Мөхәмәтша Буранғоловтың XX быуатҡа тура килгән әҙәби, ғилми һәм сәйәси-ойоштороу эшмәкәрлеге лә раҫлай. Был, әлбиттә, осраҡлы хәл – күренеш була алмай, фәҡәт заруратта яралған һәм ваҡыт һынауын күтәргән идеянан башҡа бер ни түгел. Үҙәк комитетсылар менән чекистар ғына ул бер-ике быуын ғүмерендә тотош илде, барлыҡ әҙәм затын коммунист рухлы итергә тырышып, үҙҙәре менән килешмәгән алтмыш алты миллиондың башына еткән, сәйәси, ижтимағи, иҡтисади тормошто, фән, әҙәбиәт, сәңғәт, ғөмүмән мәҙәниәт өлкәһен, берҙән, синфи ҡалыпҡа һалып, шуны башҡаларҙан да талап иткән, икенсенән, урыҫ булмаған халыҡтарҙың тарихи үткәнен, милли әҙәбиәтен һәм сәнғәтен инҡар итеү юлына баҫҡан. Ошондай шарттарҙа Мөхәмәтша Буранғолов үҙенең ғилми хеҙмәттәре һәм әҙәби ижады менән башҡорттоң Мәскәү дәүләтенә ҡушылғанға тиклем үк үҙ тарихы, үҙ мәҙәниәте, үҙ әҙәбиәте, үҙенең рухи гәүһәрҙәре булған тигән фекерҙе раҫлаған, шул арҡала хатта төрмә, һөргөн «һурпаһын»да аҙ татымаған.

29. **Һарыбай бейҙең улы Сәйеткол тархан 1/29.**

Бейҙең улы шулай уҡ бей булырға тейеш кеүек ине, ә ул тарханға әйләнгән. Был – күп нәмә тураһында һөйләгән факт: ҡара-табындар нәҡ ошо ике быуын йәшәгән арауыҡта Мәскәү дәүләтенә ҡушылған. Быныһы- XVI быуат урталарына тура килгән хәл - ваҡиға. Ошо датаға таянып һәм быуындар һанынан сығып, уларҙың әүәлге һәм яңы урында күпме йәшәгәндәрен самаларға мөмкин. Һәр быуын уртаса 50-60 йыллап ғүмер һөргән булһа, йәмғеһе 750 – 800 йыллап ваҡыт уҙған, тимәк. Икенсе төрлө әйткәндә, Тубыл, Иртыш, Миәс, Абзан яҡтарында ҡара-табындар 7-8 быуат йәшәгән.

Артабан уларҙың хәл-торошо башҡасараҡ төҫ һәм йүнәлеш алған.

30. **Сәйеткол улы Тәнекәй тархан 1/30.**

Мәскәү дәүләтенә ҡушылғас та, әле ҡайһы берәүҙәр Себер хандары менән араларҙы өҙмәгән саҡта, аталы-уллы Сәйетҡол һәм Тәнекәй тархандар тәүге көндәрҙән үк яңы дәүләт менән хеҙмәттәшлек итеү юлын һайлаған – Яйыҡ һәм Ашҡаҙар буйҙарында батшаларҙың йомоштарын йомошлап йөрөгәндәр.

31.**Тәнекәй улы Аҡынсыҡ тархан 1/31.**

Себер, Ноғай, Ҡазан ханлыҡтарының өҙлөкһөҙ баҫымы арҡаһында, йәғни сараһыҙҙан Башҡортостан үҙе теләп Мәскәү дәүләтенә ҡушылғас бер быуат уҙыр-уҙмаҫтан Рус дәүләте, Көнбайышта аҙмы-күпме һиллек урынлашыу менән үк, үҙенең төп хәстәрен Көнсығышҡа – Башҡорт иленә йүнәлткән: тынғы белмәҫ асабаларға тышау һалыу, ҡаҙаҡтар менән элемтәләренә сик ҡуйыу маҡсатында ерҙәренә ингән, атабыраҡ әйткәндә, Тубыл – Ырымбур сик һыҙығын нығыта башлаған, Мәскәү һәм урыҫ губерналарына иң яҡын Ҡазан губернаһын Себер һәм Урал аръяғы менән тоташтырыр юл һалдырған (Яңы Мәскәү юлы тип аталған ул юл), ана шул һыҙыҡ һәм юл буйлап ҡала-ҡаласыҡтар, ҡәлғәләр күтәрелә барған, унда ҡоралллы урыҫ казактары ҡуйылған һәм крәҫтиәндәре күсереп ултыртылған. Яңы Мәскәү юлы бер ыңғайҙан Урта Азия менән сауҙа эшен йәйелдереү юлы менән үҙ йоғонтоһон көсәйтеү сараһы ла булған. Ошо сәйәсәттең драматик асылы Аҡынсыҡ яҙмышына ла туранан-тура ҡағылған. Власть менән айҡашыуҙың һөҙөмтә бирмәҫен яҡшы аңлап, ул тыуған ерҙәрен ташлап китеп, балалары һәм ейәндәре менән бергә Ноғай даругаһындағы меңлеләреренә – Дим буйына, йомран туғандарына яҡыныраҡ һыйынған.

Ҡара-табындарҙың икенсе бер тармағы – аҡыллы уҫал Таймас Шәимов, мәҫәлән, Юлай Аҙналы менән бергә-бергә, үҙ еренә башта урыҫ аяғын баҫтырмай ҡараған, власть алдында үҙенең һүҙе үтәренә ышанған булғандыр, күрәһең. Нисек кенә тимә, А. И. Тевкелев (башҡорттоң мәшһүр

«Тәфтиләү» йырындағы ҡәһәрле әҙәм аҡтығы) илселеге составында Кесе йөҙ ҡаҙаҡтарын Рәсәйгә ҡушылырға күндергән кеше бит әле ул. Тик уның да өмөт-ышанысы барыбер аҡланмаған – уның ерҙәрендә лә Олотөп, Силәбе, Эткол, Уҡлы, Сыбаркүл һ. б. ҡәлғәләр күтәрелгән. Ана шулай Рәсәй шарттарында урыҫ булмаған халыҡтарҙың мәнфәғәтенән урыҫ милләтенең Рус дәүләтенең мәнфәғәте һәр саҡ өҫтөн ҡуйылған.

Әммә ләкин Аҡынсыҡты Дим буйында ла көтөп тормағандар-килмешәк хәлендә ҡалған ул, Агиш Әфтей улы кеүектәр бынан да ҡыуғандар. Шулай итеп, Мәскәүгә мөрәжәғәт итмәй башҡа сараһы ҡалмаған Аҡынсыҡтын. Һәм ул, бернисә ырыуҙашы менән бергә, тәхеттәш батшалар Иван Һәм Петр Алексеевичтарҙы күреп ҡулдарын үбеп, атаһы менән олатаһының Рус дәүләтенә тоғро хеҙмәт итеүҙәре, бөгөн килеп үҙенең ғәйепһеҙҙән ҡыуылып йөрөүен һөйләп биргән, уларҙан яҡлау һораған. Был хәл 1691 йылда булған. Бер йыл тигәндә Ҡазан һарайы аша Өфө воеводаһы исеменә Аҡынсыҡ өсөн Жалованный грамота килеп төшкән, бер ыңғайҙан уны яҡлау йөҙөнән әле йәшәп ятҡан урынында халыҡҡа ошоно уҡып ишеттерергә лә бойоролған булған.

Тик, һуңынан асыҡланыуынса, Аҡынсыҡ тархан дәғәү иткән ерҙәргә йомрандарҙан Өмөтбай Мырҙаш улы 1683 йылда уҡ Жалованный грамота алып өлгөргән булған. Көтмәгәндә килеп тыуған ошо хәлдән һуң, 1764 йылдың ғинуарында, йомран һәм ҡара-табындар үҙ-ара килешеп, өҫтәүенә шул килешеүҙе Ырымбур губерна канцелярияһында ла рәҫми яҡтан нығытып, ошо уҡ йылдың мартында ҡырҡтан ашыу йорт-хужалыҡ Туҡ йылғаһы буйында, ике яҡлап Кура һәм Сула йылғалары ҡойған урында төпләнгән. Шуларҙан Аҡынсыҡтың ейәне Ильяс Муллаҡай улы һәм Ҡайыпҡол Аслыҡай улы (икеһе лә старшина) исемен йөрөткән ике ауыл – Ильяс һәм Ҡайыпҡол ауылдары башланып киткән. Икеһе лә Йомран - Табын волосына ҡараған, әммә тәүгеһе тотошлайы менән ҡара-табындарҙың Аҡынсыҡ тармағынан, икенсеһе тик йомрандарҙан ғына торған: тәүгеһе - Быҙаулыҡ, икенсеһе Ырымбур өйәҙенә ингән. Шулай

итеп, ырыуҙың кескәй бер төркөмөнән барлыҡҡа килгән Ильяс ауылы ырыу берәмеге лә, административ берәмек тә булған.

32.**Аҡынсыҡ улдары Тынҡай һәм Имел тархандар 1-2/31;**

33.**Тынҡай улы Йоламан** (халыҡ телендә - «Йолош», рәсми документтарҙа «Еламанов» йәки «Юланов») **1/32;**

34.**Имел улы Буранғол тархан 1/32.**

Мөхәмәтша Буранғоловтарҙың фамилияһы уның исеменән яһалған. Ғәмәлдә Ильяс ауылы ана шул Аҡынсыҡтан, Аҡынсыҡтың ике улы Тынҡай менән Имелдән башланып, ағалы-энеле ошо икәүҙең күп һанлы балаларынан йәйелеп киткән. Дөрөҫ, бында улар менән бергә Кәлембәт һәм уның улы Мотал, Хөсәйен һәм уның улы Хәлит, Зайсан һәм уның улы Сәйфелмөлөк, Ҡазаҡбай һәм Аллабирҙе тигән ырыуҙаштары ла күсенеп килгән (Мәскәүгә лә, бәлки, ошо уҡ кешеләр барғандыр). Тик һуңғыларының нәҫел - нәҫәбе әллә ни ҙурҙан түгел, һәр быуында берәм-һәрәм генә.

Әҙәм балаһы шәхес булараҡ ғаиләлә һәм ғаилә традицияларында,йәғни уның ғөрөф-ғәҙәте һәм менталитеты ерлегендә формалаша. Ауыл шарттарында уның формалашыуында тәбиғәт менән ауыл йәмғиәте, ауыл мәҙәниәте лә ҙур роль уйнай. Ошоно күҙҙә тотоп, Ильяс ауылының шәжәрәһен тәҡдим итәм. Ул архив материалдары мөмкинлек биргән тиклем төҙөлдө – XIX быуаттың 60-сы йылдарына килеп терәлде. Артабан башҡа сығанаҡтар буйынса Мөхәмәтша Буранғолов шәжәрәһе генә тәҡдим ителә.

35-40. **Йоламан улдары Муллаҡай, Ҡулсара** (1769 - 1845),**Солтангәрәй** (1775 - 1817),**Салих (1784 - 1844), Ғәбделвахит**(1790 - 1820), **Яҡуп** (1794 - 1855) **1 - 6/33;**

41 - 44. **Буранғол улдары Ҡасҡын, Ҡорамша, Хоҙайбирҙе, Айыткол 1 - 4/33;**

**45. Кәлембәт 1/33;**

**46. Хөсәйен 1/33;**

**47.Аллабирҙе 1/33;**

**48.Зайсан 1/33;**

49. **Ҡазаҡбай 1/33.**

Йоламан улы Муллаҡай – Аҡынсыҡтың ейәне, гел олатаһы менән бергә күсеп йөрөгән, ағалы – энеле алты туғандың иң олоho, тарихҡа Ҡыҙрас һәм Ильяс старшиналарҙың атаһы, Ҡыҙрас улы Бикташ старшинаның олатаһы булараҡ ингән. Бигерәк тә Ҡыҙрасы-тарихта киң билдәле шәхес, П. И. Рычковтың «Ырымбур тарихы» (Ырымбур, 1898) китабында уға һылтанмалар бар; башҡорт восстаниеларын баҫтырыусы И. К. Кирилловҡа ярҙам иткеләгән, ә атаһы Муллаҡай быға ғаршы төшмәгән; 1742 йылда ике улы ла, Аҡынсыҡ кеүек үк, Мәскәүгә барып Жалованный грамота алған; икеһе лә күп ерҙәр биләгән эре феодал; 1743 йылға тиклем Ҡыҙрасы Себер, Ноғай, Ҡазан даругаларындағы Ҡара-Табын волосының баш старшинаһы, Ырымбур губернаторы И. И. Неплюевтың административ реформалары нигеҙендә был вазифа бөтөрөлгәс, волость старшинаһы булып ҡалған; Ильяс та –волость старшинаһы; бүтәндәр ер һатҡанда йәки ҡоромтаға биргәндә икеһе лә шаһит булырға яратҡан; ә Ҡыҙрасы нәпсеһенә баш була алмайынса 1770 йылда хатта бүтәндәрҙең еренә припущенник булып кергән.

Ә ғөмүмән тархан һәм старшина булыу ул-дәүләтеңә хәрби кеше сифатында шәхсән хеҙмәт итергә тейешлеһең тигәнде аңлатҡан. Һәм тархан старшиналар сик буйҙарын һаҡлау эшен ойошторғандар, үҙҙәре лә ваҡыт-ваҡыт шунда һаҡҡа баҫҡандар, батшалыҡ алып барған һуғыш кампанияларына йәлеп ителгәндәр, шулай уҡ үҙ волосында халыҡтан яһаҡ йыйғандар. Уның ҡарауы, үҙҙәренән яһаҡ түләтелмәгән, үҙ ырыуы эсендә иң уңдырышлы ерҙәр уларға бүленеп бирелгән, төҙөлөш эшенә ярарҙай ағас-урманлы ерҙәр ҙә улар ҡарамағында булған. Әммә ырыуҙаштар алдындағы был өҫтөнлөк оҙаҡҡа һуҙылмаған-батшаларҙың указы менән

башҡорт ерҙәрен талауҙар көсәйгәс тә, тархандарҙың өҫтөнлөгө юҡҡа сыҡҡан.

Яңы урында йорт-ҡура рәтләп, үҙ донъяларын көйләп бөтөүгә тирә-яҡта 1773 йылда Крәҫтиәндәр һуғышы тоҡанып һәм йәйелеп киткән. Билгеле, ильястар унда ҡатнашмаған.

Ошо уңай менән һорау тыуа: халыҡ һынлы халыҡ һуғышында ҡатнашмағандары өсөн уларға гэғәйеп ташлап буламы? Һорауға һорау менән яуап бирһәк, тарихи хәҡиҡәткә ҡаршы килмәҫбеҙ кеүек. Империя һынлы империяға ҡаршы аҙ һанлы халҡыбыҙ беренсе тапҡыр ғына күтәрелмәгән, ошоға тиклем дә, ошонан һуң да һәр ҡайһыһы күп юғалтыуҙар менән тамамланған: ауылдар үртәлгән, ир-ат һөргөнгә һөрөлгән, аҫылған, киҫелгән, ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға урыҫ заводсыларына, алпауыттарына һәм хәрбиҙәренә, татар мурзаларына таратылған. Тимәк, империя башҡорт иҫәбенә урыҫ, татар генофондын арттырған, ә беҙҙекен аңлы рәүештә кәметкән. Быныһы-таяҡтың бер башы. Икенсе башына күҙ һалайыҡ: Башҡортостан менән Украина Мәскәүгә ҡушылған дәүерҙә, мәҫәлән, уртаҡ Рәсәй дәүләтендә урыҫ халҡы 50 процент та тәшкил итмәгән. Хикмәт хата унда ғына ла түгел – алыҫтаныраҡ йәнә бер ғибрәтле һәм фәһемле миҫал: Тасманияла Британ империяһы ҡаршы күтәрелгән ерле халыҡты тотош ҡырып бөтөргән. Осраҡлы рәүештә иҫән ҡалған берҙән-бер ҡарсыҡ, үҙе үлгәс, улемтеген ерләргә күпме генә үтенһә лә, «мәҙәниәтле» британдар барыбер төкөргәндәр уның үтенесенә – һөлдәһен музейға куйып, шунан да табыш алыуындалар һаман. Икенсенән, был факт менән улар британ ҡоралын, британ мәҙәниәтен, британ менталитетын һәм аҡыл-интеллектын данлайҙар. Хәйер, бындай миҫалды әллә ҡайҙан эҙләйһе түгел: Хажи-Мораттың да баш һөйәге - Петербургта, ҡалған ағзалары икенсе урында ята бит. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, империя, асылы менән, ҡайҙа ла империя булып ҡала. Һәм тарих, тарихи процесс бер ҡасан да тура һыҙыҡ буйынса ғына бармай. Башҡорттарҙың бөгөнгө хәл-торошо ла бөгөн генә тыумаған,

быуаттар төпкөлөнән килә ул. Ильяс ауылы шикелле, утрау - утрау башҡорт ауылдары имен - аман калмаһа, кем белә, ер йөҙөндә башҡорт заты ҡалыр инеме?

1773 - 1775 йылдарҙағы восстание артынан уҡ ҡот осҡос йот һәм эпидемия ла күптәрҙе һәм мал – тыуарҙы ҡырып үткән. XVIII быуаттың һуңғы һәм XIX быуаттын, тәүге сиректәре олатайҙарыбыҙ өсөн дә үтә ауыр килгән. Уларзың ауыр хәленән хатта П. И. Рычков кеүектәр ҙә файҙаланып ҡалған. Ә бит ул заманының мәҙәниәтле кешеһе һанала, Ырымбур крайы тарихсыһы, тимәк, ғалимда, әммә бер үк ваҡытта  губерна канцелярияһы, Мосолман эштәре буйынса экспедиция һәм Ырымбур тоҙ комиссариаты ағзаһы, күренекле заводсы һәм алпауыт та. Дәүләт ҡырғынынан ҡотолоп та, аслыҡ тырнағынан ысҡына алмаусылар, балаларын үлемдән ҡотҡармаммы тип, Рычков һәм Тәвкелев шикелле иманһыҙҙарға һатҡан осраҡтар ҙа булған.

XIX быуаттың 40-сы йылдарында ҡоролоҡ һәм йотлоҡ яңынан ҡабатланған.

Ерҙәрен өҙлөкһөҙ талау арҡаһында малсылыҡ менән көн иткән башҡорт сараһыҙҙан аҙыраҡ майҙанға, йәғни игенселеккә күсергә мәжбүр булған. 1832 йылдан бирле Уральскиҙағы азактар ғәскәренә индерелгән Һамар башҡорттарын иҫәпләмәгәндә, XIX быуат урталарында Башҡорт илендә йәмғеһе 18 башҡорт өйәҙе булып, 8-ендә 519 ауыл ултыраҡ тормошҡа күскән, шул иҫәптән Ильяс ауылы ла. Бөтәһе ундай 902 ауыл булған. Ләкин ерҙе эшкәртергә лә ҡорал-инструмент кәрәк бит әле. Башҡорт ауылдарында тимерлек тоторға рөхсәт ителмәгәс, тырнаҡ-ҡулың менән күпме генә ырата алаһың эшеңде? Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорттарҙы ана шулай ижтимағи, сәйәси, иҡтисади, техник яҡтан ҡыҫа-ҡыҫа, аңлы рәүештә артҡа һөйрәгәндәр, башҡалар рәтендә алға атларға бирмәгәндәр. Шундай шарттарҙа ильястарҙы милләттәштәренә ҡарата ғәмһезлектә йәки ижтимағи-сәйәси, синфи һуҡырлыҡта ғәйепләү урынлымы һуң? Милләтеңдең ауыр көнитмеше, нисек кенә тимә, айырым

кешенең, ауылыңдың, волосыңдың, хатта губернаңдың ҡаты ҡуллы булыу-булмауынан ғына түгел, бәлки, үҙеңде, ауылыңды, тотош халҡың-милләтеңде көрсөккә килтереп терәгән режимда ла, йәғни дәүләтеңдең империалистик асылында. Мөхәмәтша Буранғолов быны яҡшы аңлаған, шуға ла башҡорттарҙы үҙ - ара берҙәмлеккә һәм кәрәк саҡта сабырлыҡҡа ла өндәгән. Ул ана шулай тарихи киң планда фекер йөрөткән.

«Башҡорт йәмғиәте» тигән төшөнсәнең йөкмәткеһенә лә ҙур әһәмиәт биргән ул. Аҡһағалдар һәм ауыл ҡарттары, сәсәндәр һәм батырҙар институтына ҡарата ул ҡалдырған яҙмаларҙан тыш бөгөнгө быуын, мәҫәлән, башҡорт йәмғиәтенең һәм тарихының эске үҫеш закондарын, шулай булғас, уның менталитетын, донъяны күреү – тойомлау рәүешен, фәлсәфәһен, әҙәбиәтен һәм сәнғәтен дә бар асылында, уҙаллы һәм ҡабатланмаҫ, феноменаль күренеш итеп күҙаллай алыр инеме?

Ҡыҫҡаһы, 33-сө быуын кешеләренән Муллаҡай улы Ильяс Ҡара-Табын һәм Йомран – Табын волостарының старшинаһы, Йоламан улы Солтангәрәй - уның ярҙамсыһы, шул уҡ Йоламандың икенсе улы-Ҡулсараһы - зауряд есаул, Яҡубы - указлы аҙансы.

Старшина, уның ярҙамсыһы, писарь, зауряд есаул, урядник, сотник, дисәтник, ауыл старостаһы-был вазифалар барыһыла урындағы идараның атрибуттары. 1798 – 1865 йылдарҙа, казактар менән бер рәттән, хәрби ҡатламға индерелгән башҡорттарҙа баш походный старшина, уның ярҙамсыһы, квартирмейстер, походный есаул, походный сотник, походный старшина, походный хорунжий шул идараның төп вазифаларын тәшкил иткән.

Әйтергә кәрәк, 1773 – 1775 йылдарҙағы восстаниенан һуң батшалыҡ мосолман руханиҙарына ҡарата ла иғтибарын көсәйткән. Быңың сәбәбе-үҙенең милли сәйәсәтен үтемлерәк итергә тырышыуынан. Ошо маҡсатта Өфөлә маҡсус рәүештә Мосолман диниә назараты ойошторолоп, быңың башына Ырымбур эргәһендәге Ҡарғалынан баш ахун Мөхәмәтйән Хөсәйеновты йылына 1500 һумлыҡ оклад менән мөфтөй итеп ҡуйғандар,

уға ярҙамға 120 һумлыҡ оклад менән өс мулла тәғәйенләнгән. Был сумманың аҙмы – күпме икәнен белер өсөн волость писаренең эш хаҡы менән сағыштырып ҡарарға мөмкин: писаргә йылына ни бары 12 һум түләнгән.

Диниә назараты Өфө канцелярияһына буйһондоролған, ә хоҡуҡи яҡтан урта суд органдарына тиңләнгән. Эш ҡағыҙҙары тик урыҫ телендә генә алып барылып, азаҡ төркисәгә ауҙарылған. Назараттың эшмәкәрлеген прокурор күҙәткән. 1789 йылдан башлап уға никах, кескәй мәсьәләләр буйынса суд эштәре, мосолман мәктәптәрен етәкләү, мәсеттәр теҙеүҙең барышын күҙәтеү йөкләтелгән. Ә бына ҡайҙа мәсет теҙеү мәсьәләһен Мәскәү үҙе хәл иткән. Шуныһы характерлы, күбеһенсә ҡаҙаҡтар менән сиктәш урындарҙа төҙөттергәндәр. Башҡортостандың эсендә иһә ике – өс урында ғына һалынған. Руханиҙар хәрби хеҙмәттән бушатылған.

М. Хөсәйенов мөфтейгә 1790 йылдан башлап Башҡортостандан ситкә сыҡмайынса ер һатып алырға һәм ул ерҙәргә сит илдәрҙән христиан динендә тормаған хоҙай бәндәләрен күсереп ултыртырға рөхсәт ителгән. XIX быуатҡа ҡараған ревиз материалдарында ғәрәптәрҙең куренә башлауы – ана шунан.

Был дәүерҙең икенсе бер яңылығы - мулла, аҙансы һ. б. Дини вазифаларҙың бәҫен күтәреү йөҙөнән назаратта уларға имтихандар үткәрә башлауҙа. Имтиханды уңышлы үтеүселәр «указлы» һаналған.

Йоламан улы Яҡуп анна шулай «указлы аҙансы» булып киткән.

50.**Муллаҡай улы Ильяс 1/34;**

51-54.**Ҡулсара балалары Йәмлих** (1803 йылғы), **Күркәм** (1803), **Хәфифә** (1809),**Ғәзизә** (1813) **1-4/34;**

55-60.**Солтангәрәй балалары Арҫланғол** (1801-1819), **Рәсүл** (1803-1855),**Зөһрә** (1810), **Бәлхиә (1811),Ҡаһарман** (1815-1854),**Мәҙинә** (1829), **1-6/34;**

61-70.**Салих балалары Йәғәфәр** (1807), **Сәйетбаттал** (1812-1820),**Ғәлиәкбәр** (1814), **Ғәлиәхмәт** (1816), **Пилимә** (1819), **Йәмилә**

(1828),**Сафъян**(1829),**Мәшәриф** (1837), **Мәсәлим** (1843-1852),**Төхфәтулла** (1848) **1 -10/34;**

71.**Ғәбделвахит улы Ғәбделфаварис 1/34;**

72-75.**Яҡуп улдары Ибнеәмин** (1825), **Шәмсетдин** (1827),**Ғәбделвәли** (1827), **Мөхәмәтсадиҡ** (1828-1844) **1-4/34;**

76-82.**Ҡаскын улдары Этҡол** (1744 - 1826), **Илбулды** (1750 - 1814), **Ғабдулваһап** (1761 - 1837), **Әптекәй** (1761), **Бәкир** (1766 - 1827), **Ҡотлобай** (1775 -1844),**Мәçкәү 1 - 7/34;**

83 - 87. **Ҡорамша улдары Хоҙайбирҙе** (1749 - 1813),**Тәңребирҙе** (1766-1840),**Йәнәбирҙе** (1768), **Ҡалмантай** (1784 - 1837), **Ибраһим** (1793) **1 - 5/34;**

88 - 89. **Айыткол улдары Ҡунаҡҡол** (1770) **һәм Ғүмәр** (1786) **1 - 2/34;**

90.**Кәлембәт улы Мотал 1/34;**

91.**Хөсәйен улы Хәлит** (1734 - 1817) **1/34;**

92-96. **Аллабирҙе балалары Нәҙерша** (1791-1849), **Моратша** (1799-1837),**Ғәҙелша** (1804-1852),**Вәлиша** (1806-1822), **Мәхүпьямал** (1811) **1-5/34;**

97.**Зайсан улы Сәйфелмөлөк** (1757-1837) **1/34;**

98.**Ҡаҙаҙбай улы Байрамғол 1/34.**

Был осорҙа Ҡасҡын улы Этҡол – йортауай старшина, Солтангәрәй улы Рәсүл - урядник, Ҡорамша улы Тәңребирҙе – зауряд сотник, уның икенсе улы Ҡалмантай – походный старшина. Ҡалмантай, нәçеле менән, дворянлыҡҡа ирешкән.

**Йорт** – тура мәғәнәлә: «йорт», «торлаҡ». Әммә ул «ил-йорт» мәғәнәһендә лә ҡулланыла. Быныһы башлыса бөгөнгө мәғәнәһе. Мөхәмәтша Буранғоловтың олаталары заманында «ил, йорт» күберәген бер ырыу йәки шуларҙың «бер төркөмө» мәғәнәһендә йөрөгән. Конкрет Ильяс ауылына ҡарата ошо һуңғы төшөнсә айырата ерҙе межалау

материалдарында осрап, «деревня Яикова с деревнями» тип алынған, йәғни быға территориаль мәғәнә һалынған. Һәм был- «ауылдар төркөмө» тигән йөкмәткене бирә. Ошондай уҡ ауылдар төркөмө ревиз материалдарында «Ильяс йортауай йәмғиәте» рәүешендә лә теркәлгән.

Йортауай старшина – ана шул бер төркөм ауылдарҙың беҙҙең осраҡта Яйыҡ, Бәхтиәр, Ҡаръяу, Ильяс ауылдарының старшинаһы тигән һүҙ.

99-102. **Ильяс улдары Бадран** (1744-1826), **Хәсән** (1757-1823), **Абзан** (1758-1843), **Хөсәйен** (1791-1852) **1-4/35;**

103-108. **Йәмлих балалары Сафъян** (1829), **Сәхипкирәй** (1832-1835), **Мәшәриф** (1837), **Минһылыу** (1841), **Мәсәлим** (1843), **Төхфәтулла** (1848), **1-6/35;**

109-115. **Рәсүл балалары Зәбиҙә** (1829), **Баян** (1839), **Өммөгөлсөм (1841), Әсфәндиәр** (1843), **Дәүлияр** (1846), **Йәрмөхәмәт** (1848), **Сыңғыҙхан** (1851) **1-7/35;**

116-119. **Ҡаһарман балалары Сәбилә** (1842), **Хәҙисә** (1847), **Баязит** (1853), **Әлифә** (1853) **1-4/35;**

120-123. **Йәғәфәр балалары Заһиҙулла** (1835), **Ғиҙҙәтулла** (1837), **Миңлебай** (1847), **Ҡыҙбикә** (1850) **1-4/35;**

124-127. **Ғәбделфаварис балалары Аблай** (1840), **Хәкимә** (1842), **Нәуширван** (1844), **Салих** (1848) **1-4/35;**

128-129. **Ибнеәмин улдары Ғәбделхәмит** (1851) һәм **Ғәбделвахит** (1855) **1-2/35;**

130. **Ғәбделвәли ҡыҙы Хәбибә 1/35;**

131-140. **Ғәлиәкбәр балалары Хансолтан** (1836), **Хәлимә** (1840), **Баймөхәмәт** (1842), **Мәрғүбә** (1846), **Мөхипьямал** (1849), **Йәрмөхәмәт** (1852), **Ишмөхәмәт** (1853),**Фатима** (1854), **Ғәлимә** (1856), **Байрамбикә** (1858) **1-10/35;**

141-142. **Ғәлиәхмәт ҡыҙҙары Нәзифә** (1846) һәм **Вазифа** (1849) **12/35;**

143-152. **Эткол балалары Әбүбәкер** (1768-1853), **Ғүмәр** (1770-1858), **Бикүс** (1784-1826), **Ҡунаҡкол** (1787-1821), **Йөҙөм** (1800), **Ноғман** (1802), **ӘҒЗӘМ** (1802), **Сәғиҙулвакас** (1805-1813), **Шиғайып** (1809-1854), **Сара** (1812) **1-10/35;**

153-155. **Илбулды балалары Аҡһары** (1782-1843), **Зәлифә** (1795), **Исмәғил** (1824-1830) **1-3/35;**

156-159. **Ғабдулваһап балалары Ғәбделмәжит** (1798-1834), **Ғәбделвахит** (1806), **Ғәбдрәхим** (1806-1852), **Илбикә** (1824) **1-4/35;**

160-165. **Бәкир балалары Шаһиморат** (1793-1813), **Гөләйшә** (1795), **Хужаморат** (1800-1839), **Хужәхмәт** (1807-1843), **Вәзиға** (1808), **Гөлзифа** (1812) **1-6/35;**

166-167. **Ҡотлобай улдары Ҡотлогилде** (1810) һәм **Рөстәм** (1812) **1-2/35;**

168. **Мәскәү улы Аслай** (1777-1851) **1/35;**

169. **Ғүмәр ҡыҙы Тайба** (1814) **1/35;**

170-171. **Хоҙайбирҙе улдары Аҫылбай** (1799) һәм **Үҙәнбай** (1803-1815) **1-2/35;**

172-185.**Тәңребирҙе балалары Дәүләтша** (1788-1847), **Фәйруша** (1800), **Хафиза** (1803), **Хәбибә** (1805), **Мөхәмәтша** (1806), **Шәрифә** (1807),**Шаһингәрәй** (1809), **Ғәлиәхмәт** (1812), **Мөхәмәткунафиә** (1812), **Хәнифә** (1814), **Ғабдулла** (1817), **Ғәбделхәким** (1819-1840), **Мулла...** (исемен тулы килеш уҡып булманы, 1829 йылғы. - Б. Х.), **Солтанғәли** (1834-1850) **1-14/35;**

186-204. **Йәнәбирҙе балалары Хәмиҙулла** (1797), **Хәбибулла** (1801), **Хәйбулла** (1801), **Ҡулбикә** (1802), **Хисмәтулла** (1803), **Миһырбаныу** (1804), **Рабиға** (1804),**Һылыубикә** (1804), **Ҡорбанбикә** (1805), **Мөхиббә**

(1806), **Сиҙыкабикә** (1808), **Хәйерниса** (1810), **Мөтиға** (1812), **Һибәтулла** (1812), **Фәткулла** (1814), **Төхфәтулла** (1816), **Мәрүәсафа** (1822), йәнә ике үгәй улы – **Имәғил** (1797) һәм **Исхаҡ** (1799) **Ҡотлобулатовтар 1 - 19/35;**

205-210. **Ҡалмантай балалары Нарымбай** (1806), **Йөҙөм** (1808), **Байтүрә** (1815), **Айһылыу** (1816), **Мөхәмәттүрә** (1820-1853), **Мөхәмәткол** (1825) **1-6/35;**

211-214. **Ибраһим балалары Хәкимә** (1805), **Хүҙәйрә** (1809), **Дәүләтбай** (1810-1815), **Хисмәтулла** (1824) **1-4/35;**

215. **Мотал улы Һәнәрғол 1/35;**

216-218. **Хәлит улдары Ибраһим, Исмәғил (Исәкәй),** (1771-1842), **Ишдәүләт** (1776-1842) **1-3/35;**

219-224. **Нәҙерша** балалары **Ширғази** (1814), **Сәхипьямал** (1819), **Ирғәли** (1822), **СураҒол** (1824), **Мәхүпьямал** (1830), йәнә бер **ҡыҙы** (исемен уҡып булманы, 1814 йылғы. - **Б. Х.) 1-6/35;**

225-229. **Моратша балалары Сәхипьямал** (1821), **Бәҙигөльямал** (1822), **Әхмәтша** (1827), **Йыһанша** (1833), **Ғәзизә** (1834) **1-5/35;**

230-235. **Ғәҙелша балалары Абдулмахъян** (1833-1855), **Мәхүп** (1836), **Хафиза** (1837), **Абдулбаҡый** (1838), **Вәлиша** (1840), **Мөхәмәтйән** (1845) **1-6/35;**

236-243. **Сәйфелмөлөк балалары Сәрбиямал** (1797), **Хисаметдин** (1799-1817), **Шурикә** (1801), **Тажетдин** (1803), **Нәзметдин** (1808), **Сәрбинара** (1809), **Туктамыш** (1810), **Төхфәтулла** (1810) **1-8/35;**

244-247. **Байрамғол балалары Иҙрис** (1804), **Ноғман** (1807-1858), **Ниғмәтулла** (1812), **Ильяс** (1822) **1-4/35.**

1844 йылда Ҡорамша улы Йәнәбирҙе күп һанлы ғаиләһе менән бергә Уральскиҙағы ғәскәргә күсерелгән; Ильяс ауылына иһә 1855 йылдың апрелендә 3-сө башҡорт кантоны, 4-се йорт, Рыҫҡол ауылынан Ҡәҙерғол Аҡмановтың улы Ибраһим (1790-1853), ейәне Килмөхәмәт (1843) һәм ейәнсәре Шәрифә (1845) Мөхәмәтҡолоевтар күсерелгән.

35-се быуындан Ильяс улы Хөсәйен – походный старшина, Этҡол улы Бикүс – йортауай старшина, Тәңребирҙе улы Ғәлиәхмәт (Мөхәмәтша Буранғоловтың олатаһы) – уның писаре, Бәкир улы Хужаморат - урядник, Калмантай улы Байтүрә - урядник һәм зауряд хорунжий.

Писарь нимә эшләргә тейеш булғанмы? Ағымдағы яҙыу-һыҙыуҙан тыш, йорт исеменән Өфө, Ырымбур, һирәк-һаяҡ Мәскәү менән яҙып хәбәрләшеү – уның бурысы. Ғәлиәхмәт Тәңребирҙин Буранғолов рәсми уҡыу йорттарында уҡымаһа ла, Рәсәй закондарын яҡшы белгән, урыҫ, ғәрәп, төрки телдәрен уҙалдына өйрәнгән булһа кәрәк, балаларын да шул рухта тәрбиәләгән. Дәүләтшаһы – зауряд сотник, Абдрахманы (Мөхәмәтша Буранғоловтың атаһы) – волость старшинаһы. Үҙ ғаиләһе һәм нәҫел-нәҫәбенә, ауылына, йортона, волосына ҡағылышлы бар мәғлүмәтте йыя килгән (Баязит Бикбайҙың атаһы Ғаяз Бикбаев шикелле). Быға ғәжәпләнәһе түгел, сөнки булһын ревизматериалдары, булһын ерҙәрҙе межалау, һатыу, шуларға бәйле дәғүә, суд ҡарарҙары һ.б.ш. – бөтәһе лә уның ҡулында бер данала туплана барған. Беҙҙең өсөн ин мөһиме – Мөхәмәтшаның бәләкәйҙән шул атмосферала тәбиғи рәүештә, үҙенән - үҙе барыһын да ҡанына һеңдереп үҫеүе һәм формалашыуы. Ә уның феноменаль хәтере һәр кемгә мәғлүм. Нур Зарипов заманында уның хәтеренә хайран ҡалып, быны мәҙрәсәлә китаптар ятлау юлы менән күнегеүҙән, тип аңлатҡайны. Тик шунылһы, Мөхәмәтша шикелле мәҙрәсә аша үтеүселәрҙең иҫәп – хисабы юҡ, э бына береһенең дә хәтере уныҡы кеүек түгел. Шуның өҫтөнә, Мөхәмәтша Буранғоловтың милли рухи гәүһәрҙәрҙе аңлау һәм баһалау дәрәжәһе лә сағыштырғыһыҙ юғары, ә шуларҙы хәтерендә бикләй барыуы, ыңғай шарттар тыуғанда килер быуындарға еткереү яғын да хәстәрләүен әйтеп тораһы ла юҡ. Ошо мәғәнәлә уның хәтер һандығы - беҙҙең милли байлығыбыҙ һәм ғорурлығыбыҙ иҫәбенән, юҡһа бөгөн беҙ белгән фольклор һәм этнографик ҡомартҡыларыбыҙ күпкә ҡайтыш булыр ине.

36-сы быуын:

248-258. **Бадран балалары Аблай** (1774-1851), **Ҡорбанғәли** (1775), **Мөхәмәтрәхим** (1783), **Мөхәмәтйосоп** (1784-1829), **Бикмырҙа** (1788), **Ҡамырбаныу** (1796), **Хәкимә** (1796), **Гөләйшә** (1798), **Шәһәрбаныу** (1800), **Сәхипьямал** (1806), **Ишмырҙа** (1808) **1-11/36;**

259-266. **Хәсән балалары Усман** (1782), **Мәхмүт** (1789-1830), **Мөхәмәәхәсән**(1791), **Ғата** (1794), **Ғайса** (1794), **Разыя** (1806), **Фатима** (1809), **Мөтиға** (1814) **1-8/36;**

267-272. **Абзан балалары Бузан** (1776-1854), **Абузар** (1779-1847), **Ғәбит** (1781-1831), **Рәхәт** (1815), **Рыҫмөхәмәт** (1821), **Байрамғол** (1823) **1-6/36;**

273-277. **Хөсәйен балалары Сәғит** (1791- 1852), **Рухыя** (1797), **Мырҙабулат** (1798-1823), **Ғәли** (1802-1824), **Ғилман** (1808) **1-5/36;**

278. **Аҫылбай ҡызы Илбикә** (1833) **1/36;**

279-287. **Дәүләтша балалары Мөғлисолтан** (1810), **Динә** (1812), **Ғәлиәкбәр** (1813), **Ғәйшә** (1814), **Орҡоя** (1819), **Мәсәғүт** (1831), **Мәсәлим** (1831), **Өммөкамал** (1833), **Ғәлиулла** (1835) **1-9/36;**

288-293. **Фәйруша балалары Әминә** (1820), **Йәмилә** (1823), **Сәбилә** (1830), **Ғиҙҙәтулла** (1833-1838), **Әхмәт** (1841),**Сәйетбаттал** (1845)**1-6/36;**

294. **Мөхәмәтша ҡыҙы Хәҙисә** (1834)**1/36;**

295-300. **Шаһингәрәй балалары Ғәбделғәлим** (1829), **Ғабдулхалиҡ** (1836), **Хөсникамал** (1836), **Бәҙриямал** (1838), **Көнбикә** (1839), **Мөхәмәткирәй** (1847) **1-6/36;**

301-304. **Ғәлиәхмәт балалары Фатима (1834), Абдрахман** (1838), **Ғәйшә (1847), Өммөгөлсирә** (1855) **1-4/36;**

305-312. **Мөхәмәткунафиә балалары Хәтимә** (1814), **Сәлимә** (1814), **Таңһылыу** (1835), **Зөһрә** (1837), **Әхмәтсафа** (1839), **Бибизәйнәп** (1847), **Мөхәмәтхәсин** (1851), **Хөсниямал** (1856) **1-8/36;**

313-315. **Ғабдулла балалары Хәйбулла** (1838), **Мәрйәм** (1845), **Хәмзә** (1846) **1-3/36;**

316-326. **Нарымбай балалары Төхфәтулла** (1831), **Рәхмәтулла** (1833), **Көнһылыу** (1833), **Туйһылыу** (1836), **Таңһылыу** (1836), **Шәрәфетдин** (1837), **Байрамбикә** (1840), **Ҡотлоғужа (1841), Айһылыу (1844), Ҡунаҡкужа** (1847-1855), **Мөхәмәтшәриф** (1852) **1 - 11/36;**

327-330. **Мөхәмәттүрә балалары Илтурә** (1839), **Мәликә (1842),Мөхәмәтсәлим** (1847), **Әҙелгәрәй** (1851) **1-4/36;**

331-334. **Мөхәмәткол балалары Мөхәмәтғәли** (1846), **Байбикә** (1848), **Айһылыу** (1852), **Миңлебикә** (1855) **1-4/36;**

335-338. **Ибраһим балалары Хәкимә** (1805), **Хүҙәйрә** (1809), **Дәүләтбай** (1810-1815), **Хисмәтулла** (1824) **1-4/36;**

339-344. **Хәйбулла балалары Хәбибъямал** (1820), **Мырҙафизыҡ** (1829), **Сәфиулла** (1830), **Хәтмулла (1831), Ғатаулла** (1832), **Хөббикамал** (1832) **1-6/36;**

345-348. **Хисмәтулла балалары Хәбибъямал** (1820), **Сәхиулла** (1826), **Хөббиниса** (1829), **Ғабдулла** (1832) **1-4/36;**

349-350. **Әбүбәкер улдары Шангәрәй** (1784) һәм **Мөхәмәтсадиҡ** (1815) **1-2/36;**

351-354. **Ғүмәр балалары Зөһрә** (1818), **Ғәйшә** (1824), **Ғәләүетдин** (1827), **Ғәзизә** (1833) **1-4/36;**

355-357. **Бикүс балалары Шаһингәрәй** (1812-1826), **Гәүһәр** (1814), **Мөхәмәтсадиҡ** (1815-1820) **1-3/36;**

358-360. **Кунаҡкол балалары Ғәбделхәким** (1813), **Ғәбдрәхим** (1815), **Ғәбделлатиф** (1821) **1-3/36;**

361-368. **Әғзәм балалары Хәбибә** (1820), **Сәхипкамал** (1829), **Миңлемырҙа** (1832), **Әхмәтзариф** (1835-1859), **Солтанмәхмүт** (1840), **Раян** (1842), **Даран** (1843), **Бәҙигөлъямал** (1846) **1 - 8/36;**

369-371. **Шиғайып балалары Ғәлиулла** (1832), **Фатима** (1834), **Бибиғыйзей** (1836) **1-3/36;**

372-379. **Аҡһары балалары Миңлебикә** (1802), **Исмәғил** (1805), **Илбикә** (1808), **Биктаһир** (1809-1849), **Зөләйха** (1816), **Мәликә** (1818), **Ғәбделвахит**(1830),**Ишнияз** (1835) **1-8/36;**

380-381. **Ғәбделмәжит балалары Ғәделмәнәф** (1823) һәм **Әсмәбикә** (1829) **1-2/36;**

382. **Ғәбделвахит ҡыҙы Яҡшыбикә** (1832) **1/36;**

383-386. **Ғәбдрәхим балалары Сөйөмбикә** (1834), **Әпсәбикә** (1837), **Хоҙайбирҙе** (1843), **Хәмиҙулла** (1848-1854) **1-4/36;**

387-390. **Хужаморат балалары Ҡотлогилде** (1831), **Илбикә** (1833), **Бибикамал** (1834), **Ҡотләхмәт** (1838) **1-4/36;**

391-394. **Ҡотлогилде балалары Гөлзифа** (1833), **Гөлзәйнәп** (1833), **Ҡотлоғужа** (1834), **Иркәбикә** (1840) **1-4/36;**

395-396. **Рөстәм балалары Рыҫбикә** (1835) һәм **Ғиләкрәм** (1849) **1-2/36;**

397-406. **Аслай балалары Алламорат** (1799), **Ҡунаҡбай** (1802), **Ильяс** (1806), **Мәккә** (1807), **Кәлем** (1814-1824), **Кинйәбай** (1816), **Әлимә** (1833), **Асылғужа** (1844), **Хәнифә** (1847), **Мөғлифә** (1850) **1-10/36;**

407-410. **Һөнәрғол улдары Балта** (1790-1847), **Айыткол** (1797), **Рамазан** (1801), **Ноғман** (1806) **1-4/36;**

411. **Ибраһим улы Муллағол** (1790) **1/36;**

412-416. **Исмәғил (Иҫәкәй) балалары Хәҙисә** (1802), **Фатима** (1806), **Хәбибә** (1809), **Хәнифә** (1811), **Тимербулат** (1815) **1-5/36;**

417-421. **Ишдәүләт балалары Юныс** (1800), **Ғәли** (1815), ... (ҡыҙы, исемен уҡып булманы, 1832 йылғы. - **Б. Х.), Ғәлиулла** (1834), **Хәйрулла** (1836-1851) **1-5/36;**

422-423. **Ширғази балалары Мөхәмәтғәли** (1836) һәм **Шәмсикамал** (1837) **1-2/36;**

424-427. **Ирғәли балалары Маһикамал** (1841), **Әсфәндиәр** (1846), **Мөхипъямал** (1854), **Абдулфазыл** (1857) **1-4/36;**

428-429. **Сурағол ҡыҙҙары Тайба** (1857) һәм **Райхана** (1854) **1-2/36;**

430-435. **Тажетдин балалары Сөләймән** (1829), **Динә** (1833), **Әминә** (1836), **Мостафа** (1848), **Хәбирә** (1852), **Хәйрулла** (1852) **1-6/36;**

436-444. **Нәзметдин балалары Шәмсетдин** (1834), **Ғәфифә** (1834), **Шәрәфетдин** (1837-1851), **Ямалетдин** (1840), **Һылыубикә** (1842), **Сиразетдин** (1845), **Хисаметдин** (1848), **Ғималетдин** (1851), **Аҙнабикә** (1855) **1-9/36;**

445-446. **Төхфәтулла балалары Ғабдрахман** (1836) һәм **Нәфисә** (1837) **1-2/36;**

447-448. **Ноғман балалары Байморат**(1833) һәм **Гөльямал** (1839) **1-2/36;**

449. **Ильяс ҡыҙы Мөхипъямал 1/36;**

450-452. **Ибраһим улдары Мөхәмәтша** (1824-1856), **Дәүләтбай, Солтанмәхмүт** (1838-1855) **1-3/36.**

Ошо быуын кешеләренән Бадран улдары Аблай менән Ҡорбанғали – зауряд сотниктар, Хәсән улы Ғайса – указлы мулла, Ғүмәр улы Ғәләүетдин - азансы.

Екатерина II Ырымбур губернаторы Д. В. Волковҡа ебәргән йәшерен бер күрһәтмәһендә, губерна менән етәкселек итеүҙең төп бурысы – Бохара һәм Хиуа сауҙагәрҙәре менән бәйләнеште көсәйтеүҙә, тип билдәләгән. Губернатор үҙ сиратында дәүләттең стратегик планын бойомға ашырыр өсөн был яҡтарҙа игенселек майҙанын арттырыу мотлаҡ, ә быға башҡорттарға ҡаршы йүнәлтелгән өс кәртәне алып ташламайынса ирешеп булмай, тип яуап ҡайтарған. Ул кәртәләр, Д. В. Волков фекеренсә, түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: берҙән, башҡорттарға ситтән эшсе көсөн йәлеп итеү тыйылған, икенсенән, сыуаш, черемис һ.б. менән хеҙмәттәшлек итеүҙәре һаман сикләнә килә, өсөнсөнән, эш ҡоралын етештереү мөмкинлегенән мәхрүмдәр. Крайҙың етештереүсәнлек һәләтен алға ебәрмәй тороп, сауҙа эшен йәйелдереү һәм шул юл менән Урта Азияны Рәсәй әйләнешендә ышаныслы тотоу мөмкинлеге лә шикле, шуға ла башҡорттарға ҡаршы йүнәлтелгән тәүге ике кәртәне юҡҡа сығарырға ваҡыт етте, ә эш ҡоралын Ҡазан губернаһынан килтереп һатыу һорала, тигән Д. В. Волков. Тәү ҡарамаҡҡа, әбей батша менән Сенат уның тәҡдимдәрен белмәмешкә һалышҡан, ғәмәлдә иһә башҡорт иленең тәрәккилегенә башҡорттарҙың үҙҙәрен ҡатыштырмай хәл итеү юлын һайлаған.

Нимәнән күренә был? XIX быуат аҙағында Рәсәй статистика комитеты тарафынан Ырымбур һәм Өфө губерналарына арнап сығарылған ике баҫмала быға шаҡтай тулы яуап бирелгән.Рәсәй империяһының урыҫ булмаған халыҡтарға, был осраҡта башҡорттарға ҡарата сәйәсәте өс йүнәлештә – уларҙы урыҫлаштырыу, христианлаштырыу һәм һан ярынан артыҡ ишәйтмәү йүнәлештәрендә алып барыла, тиелә унда туранан-тура, йәшереп-нитеп тормайынса.

Әленән-әле ғабатланып торған ҡоролоҡ менән йотлоҡтан нисек тә ҡотолоу сараһын да эҙләгәндәр был осорҙа. Эҙләй торғас, келәттәр төҙөп, шунда запас иген туплау фекеренә килгәндәр һәм шундуҡ халыҡтан аҡса йыя, иген тапшырта ла башлағандар.

37-се быуын:

453-462. **Аблай балалары Мырҙамбикә** (1799), **Көмөшбикә** (1806), **Ҡотлояр** (1807), **Алмабикә** (1808), **Йомағужа** (1819), **Дәүләтхужа** (1825), **Аҡынсыҡ** (1836), **Нух** (1841), **Мәғрифә** (1846), **Хәнифә** (1856) **1-10/37;**

463-467. **Корбанғәли балалары Алламорат** (1800-1820), **Солтанморат** (1803), **Мөхәмәтсадиҡ** (1811), **Солтангилде** (1829), **Хәбибулла** (1847) **1-5/37;**

468-475. **Мөхәмәтрәхим балалары Мөхәмәтҡол** (1807), **Хәлимә** (1811), **Нәзифә** (1813), **Кәлимулла** (1819), **Сабит** (1826), **Солтанғәли** (1828), **Мырҙағәли** (1833), **Мөхәмәтсафа** (1841) **1-8/37;**

476-481. **Мөхәмәтйосоп балалары Мөхәмәтйән** (1811), **Абдрахман** (1817), **Әхмәтйән** (1818), **Хәйерниса** (1821),**Сәғиҙә** (1822), **Тәхәү** (1825) **1-6/37;**

482-489. **Бикмырҙа балалары Ишмырҙа** (1808), **Иманғол** (1811), **Сәйетбаттал** (1811), **Исламғол** (1821), **Иҫәнғол** (1825), **Сафура** (1827), **Ғабдулла** (1841), **Ғабдрахман** (1847) **1-8/37;**

490. **Ишмырҙа ҡыҙы Миңлесолтан** (1833) **1/37;**

491-498. **Усман балалары Яхъя** (1810), **Муса** (1813), **Гәүһәр** (1815), **Исмәғил** (1821), **Юныс** (1826-1854), **Хәлиҙә** (1827), **Йәмилә** (1833), **Әминә** (1841) **1-8/37;**

499-503. **Мәхмүт балалары Исхаҡ** (1822), **Тутыя** (1824), **Ишмөхәмәт** (1827), **Абдулмахъян** (1829), **Ғәбделмәхүзәт 1-5/37;**

504-510. **Ғаиса балалары Ғайфулла** (1825-1859), **Фәхретдин** (1833), **Йосоп** (1835—1844), **...Сафа** (исемен тулыһынса уҡып булманы, 1835 йылғы.- **Б. Х.), Шәрәфетдин** (1838), **Сафыя** (1842), **Латифа** (1845) **1-7/37;**

511-517. **Бузан балалары Мөхәмәтсадиҡ** (1798), **Ғәбделвахит** (1800), **Мөхәмәдияр** (1806), **Шаһимарҙан** (1809), **Мөхәмәтша** (1812), **Шаһиәхмәт** (1815), **Ҡолой** (1819) **1-7/37;**

518-526. **Абузар балалары Ғабсалиҡ** (1798), **Абдулхалиҡ** (1800), **Шаһиәхмәт**(1809), **Мөхәмәдияр** (1809), **Мөхәмәтвәли** (1811), **Мөхөмөтша** (1811), **Ғәйшә** (1814), **Әхмәтша** (1815), **Таңатар** (1818) **1-9/37;**

527-531. **Ғәбит балалары Мөхәмәтғәлим** (1823), **Ғәбделғәлим** (1823), **Мөхәмәтсәлим** (1827), **Мөхәмәтказый** (1829), **Мөхәмәтғәли** (1833-1834) **1-5/37;**

532-535. **Рыҫмөхәмәт балалары Миңһылыу** (1848), **Әбүбәкер** (1852), **Мөхәмәтғәли** (1855), **Вәлиулла** (1858) **1-4/37;**

536. **Байрамғол ҡыҙы Сафура** (1855) **1/37;**

537-542. **Сәғит балалары Лоҡман** (1818), **Хәлимәямал** (1820), **Фазила** (1824),**Сәлмән** (1833), **Мәғрифә** (1838), **Ғилман 1-6/37;**

543-550. **Ғилман балалары Бәҙигөльямал** (1829), **Миниса** (1833), **Баһаутдин** (1835), **Зөлкәрнәй** (1840), **Мөғлифә** (1843), **Көҫәпәй** (1848), Ғә... (исемен уҡып булманы, 1854 йылғы.- **Б. Х.), Ғәлиәхмәт** (1857) **1-8/37;**

551-558. **Шангәрәй балалары Мөхәмәтхан** (1818—1854), **Муллағәли** (1832-1840), **Мөхәмәтказый** (1834), **Гөлбостан** (1841), **Гөлбәғиҙә** (1843), **Мөхәмәтбаҡый** (1847), **Мөхәмәтғәли** (1847), **Мөхәмәтвәли** (1857) **1-8/37;**

559-564. **Ғәләүетдин балалары Ғәзизә** (1843), **Ғималетдин** (1845), **Ғәфифә** (1848), **Хәлиҙә** (1850), **Вазифа** (1853), **Хәҙисә** (1857) **1-6/37;**

565-569. **Ғәбделхәким балалары Ғәбделкәрим** (1832), **Хәбибъямал** (1844), **Ғәзимә** (1852), **Йәмилә** (1854), **Кинйәбикә** (1857) **1-5/37;**

570-571. **Ғәбделлатиф улдары Мөхәмәткирәй** (1845) һәм **Мөхәмәтшәриф** (1856) **1-2/37;**

572. **Миңлемырҙа улы Әхмәткирәй** (1848) **1/37;**

573. **Ҡотлогилде улы Вәлиәхмәт** (1856) **1/37;**

574-575. **Ҡотлогужа ҡыҙҙары Ғәбиҙә** (1855) **һәм Сәбилә 1-2/37;**

576-577. **Ильяс балалары Ҡунаҡбикә** (1827) һәм **Ибраһим** (1834) **1-2/37;**

578-583. **Кинйәбай балалары Миңлеғужа** (1835), **Әлифә** (1845), **Алтынғужа** (1847-1854), **Дәүләтбай** (1854), **Мәүлетбай** (1856), **Дәүләтбикә** (1856) **1-6/37;**

584. **Төхфәтулла улы Йәнтүрә** (1838) **1/37;**

585-591. **Биктаһир балалары Разыя** (1830), **Буранғол** (1833), **Әлифә** (1834), **Хәнифә** (1836), **Түркинә** (1840), **Мөғлифә** (1844), **Шәрифә** (1847) **1-7/37;**

592. **Ғәбделвахит ҡыҙы Әскәпъямал** (1856) **1/37;**

593. **Ишнинияз улы Фәйруша** (1857) **1/37;**

594-597. **Ғәбделмәнәф балалары Ғәли** (1850), **Алмабикә** (1851), **Ғабдулла** (1852), **Хәмиҙулла** (1856) **1-4/37;**

598-599. **Мәсәлим балалары Хажимөхәмәт** (1848-1853), **Бәҙигөльямал** (1858) **1-2/37;**

600-603. **Абдрахман улдары Сәғәҙи, Дәүләтша, Бөҙритдин һәм Мөхәмәтша** (Мөхәмәтша Буранғоловтың атаһы.- **Б.Х.) 1-4/37;**

604-615. **Балта балалары Мәҫкәү (1811), Әсхәпъямал** (1815), **Дауыт**(1818-1843), **Мәүлетбикә** (1821), **Сөләймән** (1827), **Сербикә** (1830), **Арыубикә** (1831), **Аҙнабикә** (1841), **Һылыубикә** (1844), **Якшыбикә** (1847), **Аҫылбикә** (1852), **Шәрифә** (1856) **1-12/37;**

616-622. **Айыткол балалары**... (ҡыҙы, исемен уҡып булманы, 1823 йылғы.-**Б.Х.), Ҡотлогилде** (1829), ... (йәнә бер ҡыҙы, исемен шулай уҡ уҡып булманы, 1830 йылғы. - **Б. Х.), Мөхәмәтдәмин** (1832), **Мәхүпъямал** (1834), **Мөхәмәткәрим** (1842), **Айһылыу** (1837) **1-7/37;**

623-630. **Рамазан балалары Һылыубикә (1827), Солтанбикә** (1828), **Кинйәбикә** (1830), **Вилдан** (1830-1854), **Байназар** (1833), **Кәлем** (1838), **Аҡназар** (1839), **Уҡабикә** (1843) **1-8/37;**

631-635. **Ноғман балалары Аллабирҙе** (1830-1843), **Уҡабикә** (1833), **Ҡунаҡбай (1846), Иркәбай** (1852), **Солтангәрәй** (1856) **1-5/37;**

636-641. **Муллағол балалары Кинйәбикә** (1808), **Ғүмәр (1812),Зөләйха** (1815), **Айбикә** (1824), **Солтангәрәй** (1832), **Мөхәмәткирәй** (1833-1844) **1-6/37;**

642-647. **Тимербулат балалары Хәҙисә** (1837), **Мырзабулат (1840), Динмөхәмәт** (1846-1851), **Әлифә** (1848), **Шәрифә** (1852), **Вәлиәхмәт** (1855) 1-6/37;

648-652. **Юныс балалары Иҙрис** (1827), **Әйүп** (1833), **Нух** (1838), **Ибраһим** (1840), **Ғиззәтулла** (1848) **1-5/37;**

653-659. **Ғәли балалары Фәткулла (1841), Дауыт** (1845), **Йосоп** (1848), **Ғә...** (исемен уҡып булманы, 1852 йылғы. - **Б. Х.), Миңлехәбибә** (1856), **Мәғрифә** (1857), **Муллағәли** (1858) **1-7/37;**

660. **Ғәлиулла улы Зәһиҙулла** (1858) **1/37;**

661. **Сөләймән улы Вилдан** (1858) **1/37;**

662-665. **Мөхәмәтша балалары Әхмәтша** (1848), **Ғәзизә** (1849), **Йыһанша (1854), Абдулла** (1856) **1-4/37.**

Быуындаш ильястарҙан Нарымбай улы Төхфәтулла - урядник, Усман улы Муса - хорунжий, Бикмырҙа улы Исламғол – фельдшер («оспопрививатель»), Ғәбит улы Ғәбделғәлим зауряд хорунжий һәм бер уҡ ваҡытта йортауай старшина булған. Фельдшерлыҡҡа рәсми уҡыу йортонда уҡығандар, башлыса, Ҡазанда.

Волость старшинаһы – Ғәлиәхмәт улы Абдрахман, Мөхәмәтша Буранғоловтың атаһы. Ул 1838-1900 йылдарҙа йәшәгән. Замана уның алдына ике ҙур мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйған. Беренсеһе старшиналар институтының бер ни тиклем үҙгәртелеүенә бәйле. Элек старшина итеп меңәр баш малы булған тархандар ғына тәғәйенләнгән булһа, хәҙер уны тотош волость һайлаған башта, азаҡ губернатор раҫлаған йәки кире ҡаҡҡан. Раҫланғаны әүәлгесә үҙ волосында яһаҡ йыйған, үҙ биләмәһендәге тәртип өсөн яуап биргән. Өфө воеводаһы указдарын еренә еткереп үтәргә бурыслы булған. Юғарыла әйтелгәнсә, күпер биләүселәр феодалға әүерелә барған. Ошо яҡтан ҡарағанда, Абдрахман Буранғолов урта ҡул байҙар (коммунистар теле менән әйткәндә, середняк) иҫәбендә йөрөгән.

Икенсе мәсьәлә – әлеге лә баяғы ер мәсьәләһе, башҡорттарҙың төп байлығы ла шул бит инде. Элек тә, хәҙер ҙә уны межалау дауам итә торғас, был эш ғәйәт драматик төҫ алған, сөнки артабан таларлыҡ ерҙәре ҡалмаған. Бына шуға бер-ике миҫал: Ырымбур губернаһында 35 миллион дисәтинә ер иҫәпләнеп, шунан башҡорттарға ҡарағаны 14 миллион (икенсе сығанаҡтар буйынса, 11 миллион) дисәтинә тәшкил иткән. Әммә был һандарға тәнҡит күҙе менән ҡарамай булмай, ни өсөн тигәндә ул ерҙәрзең байтаҡ өлөшө ағас - урманлы һәм игенселек өсөн ҡулайһыҙ булған. Бынан тыш, «башҡорт ере» атамаһы аҫтында әллә күпмеһен урыҫ заводтары алып торған. Шуның өҫтәүенә дүрт өйәҙҙә 300 мең дисәтинәгә яҡынын урыҫ казактарына тартып алып биргәндәр. Ошоларҙан һуң да урыҫ алпауыттары ҡайҙа көслөк менән, ҡайҙа алдашып һәм мутлашып башҡорт ауылдарына уҡ килеп терәлгәндәр. Ошондай «үҙгәрештәрҙән» һуң төшөрөлгән карталарға күҙ һалһаҡ, Туҡ-Соран буйҙарында башҡорт атамалары һәләк һирәгәйгәнен, Плешанов, Красиков һ. б. ш. урыҫ алпауыттарының исемдәре менән сыбарланып бөткәнен күрергә мөмкин, Хикмәт бында Абдрахман старшинала йәки яңғыҙ Плешановта ла түгел, әлбиттә. Бөтә хикмәт - ана шул исемдәрҙең артында торған дәүләт системаһында, ят

бауырҙарға («инородецтарға») ҡарата ерҙәренән ҡыҫырыҡлау, үрсетмәү, тәрәҡҡилектән мөмкин тиклем ситләштереү сәйәсәтендә: Плешанов шикелле алпауыттарға, мәҫәлән, Һамар яғынан үҙ крәҫтиәндәрен күсереп ултыртырға, талап алған башҡорт ерҙәрен немецтарға һатып кесә ҡалынайтырға юл асҡан булһа, башҡорттарға ер «бүлгәндә» фәҡәт ир заттарына иҫәпкә алынған, ҡатын-ҡыҙ иһә һауа менән туҡланырға тейеш булған.

Бындай эштәр судта ҡаралған ваҡыттар ҙа ла ике төрлө ҡарар сығарылған. Әгәр ергә урыҫ кешеһе дәғүә иткән булһа, мәсьәлә уның файҙаһына хәл ителгән. Әгәр башҡорт менән башҡорт дәғүләшһә, ҡарар аҫабалыҡ закондары нигеҙендә сығарылған. 1844 йылда үҙенең ихтыярынан тыш Уральскиҙағы ғәскәргә ғаиләһе менән күсерелгән Ҡорамша улы Йәнәбирҙенең ир еткән бер улы быуат аҙағында тыуған ауылына ҡайтып төшөүгә Ильяс ауылы Үрге, Урта, Түбән Ильяс ауылдарына бүленеп, ер мәсьәләһе лә үтә ҡатмарлашып киткән булған. Был-алыҫ туғандар араһын да, яҡын туғандар араһын да боҙмай ҡалмаған. Ревиз буйынса үҙенә тейешле ерҙе талап итә башлағас, уға ер бүлергә ашығыусы табылмаған. Ахыр сиктә мәсьәләне суд аша хәл итергә тура килгән уға.

Ер резина түгел бит: ир затындағы йән иҫәбенән сығып 15-әр (тархандарға - 40-ар) дисәтинә көтөүлек, бесәнлек һ.б.ш. дөйөм ҡулланыш өсөн йәнә күпмелер ер бүленгән. Йылдар үтеү менән, ер тураһындағы положениеға батшалыҡ яңынан-яңы өҫтәмәләр индергән, бер мәле хатта үҙ өлөшөңдө һатырға рөхсәт ителгән. Ошонан файҙаланып, Абдрахман Буранғолов ун йорт башынан берәр доверенныйҙарҙы йыйып, шуларҙы күндереп, ер һатҡан икән. Ғаиләләр ишәйеп, бүлешер ер ҡалмағас, элекке туғандар дошманлашып бөткән. «Дошманлашыу» минең һүҙем түгел, документ-тарҙа шулай тиелгән. «Көслөнөкө-донъя» тигәндәй, XIX быуат аҙағына, XX быуат башына ҡараған документаль сығанаҡтарҙа, шул иҫәптән Ильяс ауылдарына ҡарағандарында ла бындай хәлдәр тулып ята.

Ул документтарҙа Абдрахман старшина исеме лә, уның башбалаһы Сәғәҙи исеме лә осрай. Мәсьәләнең шулай ҡуйырып китеүенә бәйлеме-юҡмы – өҙөп әйтеүе ауыр, һәрхәлдә, хәллерәктәр Туҡ йылғаһы тирәләй төрлө урынға таралған. Ошо хәлдәрҙән һуң Абдрахман быуат башында Үрге Ильястан 50 саҡрым тирәһе өҫтәрәк ғәжәп матур урынға, тау битләүенә ун йорт-хужалыҡ менән бергә, үҙе унберенсеһе булып Бүләк утарына күсенгән. Һуңғы йылдарын шунда йәшәгән. 1950 йылда КГБ-ла Мөхәмәтша Буранғоловтан ошо хаҡта һорағас, «атайым старшина булып 2-3 айҙан артыҡ эшләмәне, сөнки уны губернатор раҫламаны» тип яуап биргән. Шуныһы бәхәсһеҙ, Мөхәмәтша 1888 йылдың декабрендә донъяға килгәндә, атаһы – Үрге Ильяста, ә 1900 йылдың мартында донъя ҡуйғанда Бүләктә йәшәгәндәр. Дүрт улынан төпсөгө - Мөхәмәтша, уның егет ҡорона инә барған сағы ғына булған. Атаһынан күп тә ҡалмай әсәһе лә вафат булғас, Бәҙритдин ағаһы ярҙамында аяҡҡа баҫҡан, һуңынан - 20-се йылдар аҙағына тиерлек - ошо ағаһы менән гел бергә күсенеп йөрөгән.

Әҙәм балаһы иле менән ата-инәһен һайлап алмай. Парадоксаль, әммә Рәсәй коммунистары өсөн үтә тәбиғи хәл: атаһы өсөн дә, ҡыйырһытылған милләте өсөн дә Мөхәмәтша Буранғоловҡа ғүмер баҡый яуап тоторға тура килгән. Атаһының тархандар тоҡомонан, волость старшинаһы булғаны өсөн, тархан тоҡомонан булһа ла, ул үҙе ни бары 15 дисәтинә иҫәбенән генә биләгән ерҙе. Ә халҡы өсөн яуапҡа тарттырылыуының сәбәбе икәү. 1917 йылға тиклем, Пермь тирәһендәге башҡорт заводсыларын иҫәпкә алмағанда, башҡорттар сәнәғәт, техник, социаль-ижтимағи, милли сәйәсәт йәһәтенән үҙенсәлекле резервацияла тотолоуға ҡарамаҫтан, Д. В. Волков һүҙҙәре менән үк әйткәндә, «Һәр башҡорт, хатта иң аҡтығы ла үҙен дворяндан кәм һанамаған, Украина казактары шикелле, үҙ ерем бар тип иҫәпләгән», әммә ләкин «башҡорт яҡшы йәшәгәндән баш күтәрмәгән». Ырымбур губернаторы, күреүебеҙсә, башҡорттарҙың менталитетын, донъяны үҙенсә күреүен һәм үҙенсә йәшәүен, үҙ ихтыяж-талаптарын хәл иттерергә була баш күтәреүгә саҡлы барып етеүҙәрен дөрөҫ тотоп алған.

Тарихты һәм тарихи процессты һүрәтләүсе яҙыусылар йәки аңлатыусы ғалимдар менән эске бәхәскә инеп, Мөхәмәтша Буранғолов та бит нәҡ ошоға баҫым яһаған һәм ошо мәғәнәлә тотош халҡы өсөн шәхсән яуап биргән.

38-се быуын:

666-671. **Ҡотлояр балалары Бикташ** (1839), **Муллаҡай (1843), Аҙнабай (1844), Мәғрифә** (1846), **Муллабай** (1849), **Миңлемырҙа** (1857) **1-6/38;**

672-673. **Йомағужа ҡыҙҙары Хәйерниса** (1851) һәм **Миңниса** (1858) **1-2/38;**

674-675. **Дәүләкужа балалары Айман** (1851), **Айа...** (исемен тотош уҡып булманы, 1856 йылғы.-**Б. Х.) 1-2/38;**

676-686. **Солтанморат балалары Ҡәҙербәк** (1822), **Аҫылгәрәй** (1832), **Ғәйшә** (1833), **Хәкимә** (1837), **Алтынбай** (1842), **Ҡотләхмәт** (1845), **Бикмөхәмәт** (1847), **Нәсиха** (1850), **Гөлзифа** (1851), **Шәрифэә** (1856), **Байбикә** (1858) **1-11/38;**

687. **Алламорат улы Ҡунаҡкужа** (1820) **1/38;**

688-693. **Мөхәмәтсадиҡ балалары Әсәҙулла** (1834-1856), **Хәбибъямал (1844), Вәлиулла** (1847-1851), **Мораҙым** (1849-1850), **Мөхәмәтйосоп** (1850),**Сәғиҙә** (1854) **1-6/38;**

694. **Солтангилде улы Дәүләткирәй** (1850) **1/38;**

695-703. **Мөхәмәтколл балалары Өмөткол** (1832-1856), **Әминә** (1835), **Рахманғол** (1837), **Солтанғол** (1840), **Миңлегөл** (1842), **Нәғимә** (1845), **Сәбилә** (1847), **Хисмәтулла** (1854),**Сәғит** (1858) 1 - **9/38;**

704-707. **Кәлимулла балалары Мәрғүбә** (1840), **Харис** (1846), **Хәбибъямал** (1851), **Салих** (1857) **1-4/38;**

708-710. **Сабит балалары Ғәзизъямал** (1849), **Заһиҙулла** (1851), **Хәлиулла** (1856) **1-3/38;**

711-712. **Мырҙағәли балалары Саҙыҡай** (1854), **Байдәүләт** (1857) **1-2/38;**

713-716. **Мөхәмәтйән балалары Сәрбиямал** (1838), **Мөхәмәтәмин** (1839) **1-4/38;**

717-720. **Ғабдрахман балалары Гөлбәғиҙә (1840), Гөлзаһиҙа** (1842), **Бибисафыя** (1846), **Абдулғәзиз** (1848) **1-4/38;**

721-725. **Әхмәтйән балалары Мәймүнә** (1840), **Ғабдулғарип** (1842), **Сафура (1844), Сабира** (1847), **Хәмит** (1849) **1-5/38;**

726-727. **Төхәү балалары Имамшафиҡ** (1847), **Ҡамышбикә** (1848) **1-2/38;**

728-735. **Сәйетбаттал балалары Әҙелгәрәй** (1842), **Байбикә (1844), Фатима** (1846), **Хәкимә** (1849), **Хәбибә** (1853), **Әлимә** (1854), **Хәлимә** (1856), **Хөсәйен** (1858) **1-8/38;**

736-739. **Исламғол балалары Латифа** (1845), **Шәрифә (1847), Ғәбделхәсән** (1851), **Ғиззәтулла** (1856) **1-4/38;**

740-743. **Иҫәнғол балалары Ғәбделвахит** (1851), **Иҫәнгилде** (1854), **Нәсиха** (1856), **Ильяс** (1858) **1-4/38;**

744-746. **Яхъя балалары Рәхилә** (1832), **Вазиға** (1846), **Йәнәбирҙе** (1848) 1-3/38;

747-751. **Муса балалары Искәндәр** (1835), **Ғилемзада** (1838), **Аллабирҙе (1841), Мәүлетсафа** (1844), **Лоҡман-Хәким** (1846) **1-5/38;**

752-757. **Исмәғил балалары Ильяс** (1837-1854), **Сәбилә** (1848), **Мөхәмәтғәли** (1851), **Мөхәмәтшәриф** (1854), **Нәғимә** (1855), **Ғибаҙулла** (1857) **1-6/38;**

758-760. **Юныс балалары Муллағәли (1849-1856), Мөхәмәтказый (1853), Аҫылбикә** (1855) **1-3/38;**

761-765. **Исхаҡ балалары Шәмсикәмәр** (1843), **Ишнияз** (1846), **Мөхәмәтзариф** (1849), **Айбикә** (1854), **Мәликә** (1858) **1-5/38;**

766-767. **Ишмөхәмәт балалары Арыубикә** (1852), **Баймөхәмәт** (1858) **1-2/38;**

768. **Абдулмахъян ҡыҙы Нәғимә** (1854) **1/38;**

769-772. **Ғайфулла балалары Ғәләүтдин** (1847), **Зәлифә** (1847), **Нәфисә** (1853), **Дәүләтбикә** (1858) **1-4/38;**

773. **Фәхретдин ҡыҙы Сәғиҙә** (1856) **1/38;**

774-776. **Мөхәмәтсадиҡ балалары Үҙәнбай** (1827), **Мәхмүзә** (1829), **Ғәзизә** (1837) **1-3/38;**

777-780. **Мөхәмәдияр балалары Рәхимә** (1822), **Сәбилә** (1842), **Кинйәбикә** (1847), **Ҡотлобирҙе** (1849) **1-4/38;**

781-786. **Шаһимарҙан балалары Нәзирә** (1833), **Миһран** (1837), **Миңлемырҙа** (1839-1851), **Аҫылмырҙа** (1842), **Мәҙинә (1851), Сәлимә** (1854) **1-6/38;**

787. **Шаһиәхмәт ҡыҙы Туйбикә** (1823) **1/38;**

788-791. **Ҡолой балалары Хәмиҙә** (1847), **Хафиза** (1852), **Ғәбиҙә** (1854), **Кәлимдәр** (1856) **1-4/38;**

792-795. **Мөхәмәдияр балалары Сәбилә** (1842), **Мәликә** (1845), **Кинйәбикә** (1847), **Ҡотлобирҙе** (1850) **1-4/38;**

796-798. **Мөхәмәтвәли балалары Мәүлетбикә, Миңлебикә** (1822), **Әхматша** (1833) **1-3/38;**

799. **Мөхәмәтша улы Әхмәтша** (1833) **1/38;**

800-803. **Ғәбделғәлим балалары Ғәбделхәлим** (1849), **Мәймүнә** (1853), **Мырҙамөхәмәт** (1855), **Муллаян** (1857) **1-4/38;**

804-806. **Ғилман балалары Мәликә** (1833), **Мәғрифә** (1841), **Мағлифә** (1843) **1-3/38;**

807-812. **Лоҡман балалары Фәғилә (1834), Ғыҙрас** (1847-1851), **Мирхәйҙәр** (1848-1855), **Райхана** (1852), **Хоҙайбирҙе** (1857), **Рәхимә** (1857) **1-6/38;**

813-814. **Сәлмән балалары Ҡыҙрас** (1855), **Рабиға** (1858) **1-2/38;**

815-818. **Ғәбделкәрим балалары Ғәбдрәшит** (1834), **Кәлимдәр** (1848), **Хәйҙәр** (1848), **Дәүләтбирҙе** (1857) **1-4/38;**

819. **Миңлеғужа ҡыҙы Мәүлетбикә** (1858) **1/38;**

820-829. **Сәғәҙи балалары Махъян,Тәлғәт, Һәҙиә, Хөмәйрә, Фәрзәнә, Фәйрүзә, Менәүәрә, Марат, Мәжит, Ҡунаҡкол 1-10/38;**

830-831. **Дәүләтша балалары Мәксуҙә һәм Мөкип 1-2/38;**

832-837. **Бәҙритдин балалары Мәжит, Миниәхмәт, Өммөгөлсөм, Мәүжидә, Зариф, Шәмсетдин 1-6/38;**

838 - 841. **Мөхәмәтша Буранғоловтың балалары Нәжип, Гөлсөм, Зөфөр һәм Нәккәр 1-4/38;**

842-845. **Ҡотлогилде балалары Абдулхалик** (1847), **Абдулҡасим** (1852), **Баязит** (1856), **Минһылыу** (1856) **1-4/38;**

846. **Мөхәмәтдәмин ҡыҙы Аҙнабикә** (1856) **1/38;**

847. **Байназар улы Ирназар** (1858) **1/38;**

848-853. **Ғүмәр балалары Мөхәмәтсафа** (1842), **Яҡшыбикә** (1847), **Ғәйшә** (1847), **Мәрғүбә** (1850), **Алсынбай** (1855), **Абдулғәзиз** (1857) **1-6/38;**

854. **Эйүп улы Сафиулла** (1848) **1/38.**

Мөхәмәтша Буранғоловтың ревиз һәм башҡа материалдар нигеҙендә тергеҙелгән нәҫел-нәҫәп шәжәрәһе ошоноң менән тамам. Ә хәҙер тоҡомдаштарынан айырып алып, Аҡынсыҡтан туп-тура унын үҙенә килгән һыҙыҡ тәҡдим ителәә: Аҡынсыҡ – Имел – Буранғол – Ҡорамша – Тәңребирҙе – Ғәлиәхмәт – Абдрахман - Мөхәмәтша үҙе була. Сәсәнгә тиклем, тимәк, ете быуын ғүмер һөргән, һәм быларҙың барыһы ла уға мәғлүм булған. Шуға күрә Р. Р. Кузеевтың, башҡорт шәжәрәләре уңайы менән, унда ҡан таҙалығы етешмәүе, аң буталсығы, реакционлығы хаҡында һүҙ ҡуйыртыуы марксист – ленинсы ғалимдың, теләһә-теләмәһә лә, гитлерсылар тарафынан кеше танауы арҡылы унын арий булыу-булмауын билдәләүгә бәрәбәр. Мөхәмәтша Буранғолов үткәндәр тураһында яҙғанда йәки художестволы әҫәрҙәрендә һүрәтләгәндә тарихи ысынбарлыҡ хаҡына халыҡтың гражданлыҡ биографияһы, эске үҫеш тенденцияһынан айырылғыһыҙ мәҙәниәте, рухиәте, аңы һәм психологияһы, йәғни унын милли асылы хаҡында бер ҡасан да онотмаған, улай ғына ла

түгел, быны ғалимдар менән яҙыусылар инҡар иткәнлектән бар иғтибарын, бар һәләтен үҙенең граждандлыҡ һәм сәсәнлек бурысын бына тигән итеп утәүгә сарыф иткән. Мөхәмәтша Буранғолов, асылда, башҡорттоң иң беренсе этнологы ул.